# <u>БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА</u>

## ЗАДАНИЯ ДЛЯ 8-9 КЛАССОВ
## ЧАСТЬ1.БАШКИРСКИЙЯЗЫК

**1 задание. *Емеш* һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?**

1. 4 тартынҡы, 1 һуҙынҡы өн
2. 3 тартынҡы, 2 һуҙынҡы өн
3. 2 тартынҡы, 3 һуҙынҡы өн
4. Дөрөҫ яуап юҡ

**2 задание. Тик һуҙынҡы өндән башланған юлды билдәләргә:**

1. Ялан, егет, ел, юл
2. Ил, ант, уң, өй, уй
3. Юрға, яңы, оя, эшмәкәр
4. Матур, йәш, гүзәл, күркәм

**3 задание. Ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған ҡушма һүҙ нисәнсе урында тора?**

1. Эреле-уаҡлы
2. Эреле ваҡлы
3. Эрле-ваҡлы
4. Эреле-ваҡлы

**4 задание. Ҡайһы һүҙ ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған?**

1. Волостте
2. Волостьте
3. Волостты
4. Волосты

**5 задание Нәҙек айырыу билдәһе төшөп ҡалған һүҙҙе табырға:**

1. Гөл...йыһан
2. Гөл...емеш
3. Көн...сығыш
4. Дөрөҫ яуап юҡ

**6 задание *Яҡын* һүҙенә синоним булған фразеологик берәмекте күрһәтегеҙ:**

1. Ете ҡат ер аҫтында
2. Ауыҙ менән ҡош тотоу
3. Кәзәһе артынан ҡалмай
4. Ҡул һуҙымында ғына

**7 задание. Телмәр өндәрен өйрәнгән фән нисек атала?**

1. Фонетика
2. Графика
3. Лексикология
4. Морфология

**8 задание. Һүҙ төркөмдәре генә яҙылған юлды билдәләргә:**

1. Исем, рәүеш, хәбәр, һан, алмаш
2. Исем, сифат, алмаш, эйә, һан
3. Исем, ҡылым, киҫәксә, эйә, ымлыҡ
4. Исем, сифат, алмаш, һан, ҡылым

**9 задание. Дөрөҫ яҙылған һүҙ торған юлды билдәләгеҙ:**

1. Бакуҙан
2. Бакунан
3. Баҡыуҙан
4. Бакудан

**10 задание *<u>Дәфтәрем</u> юғалды* һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙҙең ялғау төрөн билдәләгеҙ:**

1. Хәбәрлек заты ялғауы
2. Эйәлек заты ялғауы
3. Урын-ваҡыт килеш ялғауы
4. Сығанаҡ килеш ялғауы
5. Дөрөҫ яуап юҡ

**11 задание**. Һандарҙа ялғауҙарҙың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:

1. XX быуат
2. 3-се рәт
3. 1966-сы йыл
4. 31-се ғинуар

**12 задание. Ҡайһы һөйләмдә һан исемләшкән?**

1. Мостиктың дүрт мөйөшөндә – дүрт матрос.
2. Етеһе лә матур, етеһе лә батыр икән.
3. Ер йөҙөндә биш меңләгән тел бар.
4. Инде өсөнсө йыл һуғыш бара.

**13 задание. *Уның исемен белмәгән кеше юҡ* һөйләмендә алмаштың төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1. Зат алмашы
2. Күрһәтеү алмашы
3. Билдәләү алмашы
4. Һорау алмашы

**14 задание. Һөйләмдә ҡылымдарҙы табып, уларҙың һөйкәлешен билдәләгеҙ:** ***Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт*** **(Мәҡәл).**

1. Хәбәр һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Теләк һөйкәлеше
4. Бойороҡ һөйкәлеше

**15 задание.** ***Татлы бал <u>йыйыусы</u> ҡорттар тереклеккә зыян килтермәйҙәр*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдың ниндәй төркөмсәгә ҡарағанлығын билдәләгеҙ:**

1. Уртаҡ ҡылым
2. Хәл ҡылым
3. Исем ҡылым
4. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаһы

**16. Рәүешкә хас грамматик категорияны билдәләгеҙ:**

1. Заман
2. Килеш
3. Һан
4. Дәрәжә

**17 задание. Тик үҙгәртеүсе ялғауҙар ҡабул иткән һүҙҙәр бирелгән юлды билдәләгеҙ**:

1. Эшсе, эшле, эшһеҙ, эшсән
2. Сүпле, сүпләү, сүплек, сүпләнеү
3. Ирректең, иреккә, иректе, ирректән
4. Ташсы, ташлы, ташһыҙ

**18 задание.** ***Ҡәләмде*** **һүҙендә ниндәй ялғау** бар?

1. Һан ялғауы
2. Һан ялғауы һәм килеш ялғауы
3. Килеш ялғауы
4. Зат ялғауы

**19.** ***Мин хәҙер шатланам да, борсолам да*** **һөйләмендә тиң киҫәктәрҙең төрөн билдәләгеҙ:**

1. Тиң эйәләр
2. Тиң хәбәрҙәр
3. Тиң тултырыусылар
4. Тиң аныҡлаусылар

**20.** ***Ике икең – дүрт*** **һөйләмендә аҙаҡҡы һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып килә?**

1. Эйә
2. Хәбәр
3. Тултырыусы
4. Аныҡлаусы
5. Хәл

**21 задание.** ***Гөлйөҙөм ҡалтыранған ҡулдары менән кейенә һалды*** **һөйләменең аныҡлаусыһы ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?**

1. Исемдән
2. Алмаштан
3. Сифаттан

4. Сифат ҡылымдан

**22 задание. Тик һөйләм киҫәктәре бирелгән юлды билдәләргә:**

1. Исем, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы, хәл
2. Эйә, хәл, хәбәр, тултырыусы, хәл
3. Эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы, хәл
4. Хәбәр, рәүеш, сифат, тултырыусы, хәл

**23 задание. Теҙмә ҡушма һөйләмде күрһәтегеҙ:**

1. Хөрмәт иткән хөрмәт күрер.
2. Урман ҡалын, ағастары бик бейек булғанлыҡтан, юлға ҡояш төшмәй.
3. Ҡулың оҫта булһын, һүҙең ҡыҫҡа булһын.
4. Ямғыр яуғанда, Айҙар уянғайны инде.

**24 задание. Түбәндәге һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйырға кәрәк:**
***Килбәте ниндәй (?) күләгәһе шундай.***

1. Ике нөктә
2. Һыҙыҡ
3. Нөктәле өтөр
4. Тыныш билдәһе ҡуйылмай

**25 задание. *Ҡарағат, бөрлөгән, муйыл, балан – бөтәһе лә бар* һөйләмендә һыҙыҡтың ҡуйылышы ҡайһы яуап менән аңлатыла?**

1. Дөйөмләштереүсе һүҙ алдынан ҡуйылған
2. Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләм араһында ҡуйылған
3. Инеш һүҙҙе айырыу өсөн ҡуйылған
4. Бер үк һүҙ төркөмөнән килгән эйә менән хәбәр араһында ҡуйылған

## ЧАСТЬ 2. БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА

**1 задание. Түбәндәге өҙөк ниндәй әҫәрҙән алынған?**

*Яуға китеп барамын,*
*Ҡазан илен аламын,*
*Ҡазанға китеп барамын.*
*Мин Ҡазанға барғансы,*
*Ҡар яумағай, ҡан яуғай;*
*Мин Ҡазанға барған һуң,*
*Ҡан яумағай, ҡар яуғай.*

1. “Аҡъял батыр” әкиәтенән
2. “Ике сәсән” ҡобайырынан
3. “Сура батыр” ҡобайырынан
4. “Салауат батыр” ҡобайырынан

**2 задание.** Яңғыҙ ҙа, күмәкләшеп тә башҡарылған, юлдары 6-8, 7-8, 8-7 үлсәменә ҡоролоп, бейеү ритмына йәки еңел көйгә ҡалыплашҡан халыҡ ижады жанрын атағыҙ.

1. таҡмаза
2. таҡмаҡ
3. ҡыҫҡа йыр
4. мөнәжәт

**3 задание. Борон башҡорттарҙа төрлө ҡиәфәткә инә алыусы яуыз, әүермән затты нисек атағандар? (Ышаныуҙар буйынса, ул йылан булып ярала, йөҙ йыл йәшәгәс аждаһаға әүерелә, биш йөҙ-мең йылдан һуң төрлө ҡиәфәткә инә алған).**

1. ялмауыҙ
2. убыр
3. юха
4. албаҫты

**4 задание. Мәҡәл, әйтем, һынамыш һәм йомаҡтарҙан торған халыҡ ижадын нимә тип йөрөтәләр?**

1. аллегорик ижад
2. афористик ижад
3. ҡарһүҙ
4. дөрөҫ вариант юҡ

**5 задание. Түбәндә шәжәрәнән өҙөк бирелгән. Шул нәҫел сылбырынан сығып, уның ҡайһы башҡорт яҙыусыһының ата-бабаларына мөнәсәбәтле булыуын билдәләгеҙ.**
**“Иҫән хан улы – Быраҡ, Быраҡ улы – Кейек, Кейек улы – Шәриф, Шәриф улы – Ғабдулла, Ғабдулла улы – Сәлих, Сәлих улы – Ғәли ...”**

1. Ҡол Ғәли
2. Сәлихйән Күкләшев
3. Ғәли Соҡорой
4. Ғәли Ибраһимов

**6 задание. Аҫта бирелгән текстарҙы иғтибар менән уҡып сығығыҙ, уларҙың ниндәй жанрға ҡарағанлығын әйтегеҙ.**

1.Ямандарҙан йыраҡ итһен,
Яҡшыларға яҡын итһен!
Бына шулай ғүмер ит һин.
Тирә-йүнгә даның китһен!
*Йәки:*
2.Үҙең түрҙә бул һин,
Һүҙең – үрҙә булһын!
Белгәнең булһын – тәүфиҡ,
Яманлыҡтан тәүб(ә) ит!

1. шиғри парса
2. шиғри хитап
3. нәсихәт
4. афоризм

**7 задание. Түбәндәге өҙөк кемдең ниндәй әҫәренән алынған?**

Түҙемлегең, ах(ы)ры, ҡая кеүек,
Ә күңелең тулы нур ғына.
Ябайһың да, бөйөкһөң дә үҙең.
Һиңә тиңме маҡтау, йыр ғына?

1. К.Кинйәбулатова. “Уҡытыусым!”
2. У.Кинйәбулатов. “Уҡытыусыма”
3. Р.Шаммас. “Уҡытыусыға”
4. Ф.Иҫәнғолов. “Уҡытыусы Ғүмәров”

**8 задание. Төрлө әҫәрҙәрҙә бер төрлө ҡабатланып килгән троптарҙы (һүрәтләү сараларын) нимә тип йөрөтәләр?**
**(Мәҫәлән: тере һыу, үле һыу; энә буйы юл; үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш; баш һуҡҡан яҡ; ҡарсыға төш – тар бөйөр һ.б.)**

1. гипербола
2. метафора
3. метонимия
4. даими эпитеттар

**9 задание. Башҡорт халыҡ эпостарының ҡайһыныһында юлбарыҫ, бүре, бурһыҡ, арыҫлан, ҡоҙғон, һайыҫҡан, торна, өйрәк, ҡыр ҡаҙҙары, ҡорҙар һ.б. ҡатнашлығында йыйын һүрәтләнә?**

1. “Урал батыр”
2. “Аҡбуҙат”
3. “Заятүләк менән Һыуһылыу”
4. “Иҙеүкәй менән Мораҙым”

**10 задание. Думбыраның барлыҡҡа килеүе хаҡында легенда һөйләнелгән әҫәрҙе әйтегеҙ.**

1. “Ҡорҡот Ата” хикәйәте
2. “Ҡурай” әкиәте
3. “Буҙйегет” дастаны
4. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе

**11 задание. Фәхрисәрүәр, Ходадад, Ҡисыр батша, Сабыр, Абраһ һ.б. геройҙары булған әҫәрҙе билдәләгеҙ.**

1. “Бәхтиәрнамә”
2. “Мөхәббәтнамә”
3. “Хөсрәү вә Ширин”
4. “Гөлстан бит-төрки”

**12 задание. Кеше ғүмере, йәшәү мәғәнәһе, ғаилә татыулығы, ата-әсәләр менән балалар араһындағы мөнәсәбәт, хеҙмәткә баһа, батшаны мәрхәмәтле итер сифаттар, феодаль дәүләт ҡоролошо, ил менән етәкселек итеү, аҡыл, белем, һуғыш һәм тыныслыҡ һ.б. тураһында һүҙ алып барылған әҫәрҙе күрһәтегеҙ.**

1. Ҡол Ғәлиҙең “Кисса-и Йософ” әҫәре
2. Йософ Баласағуниҙың “Ҡотадғу белек” әҫәре
3. “Һуңғы һартай” әҫәре
4. “Юлай менән Салауат” эпосы

**13 задание. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт яугирҙәре менән осрашҡан немец шағирын атағыҙ.**

1. Фридрих Шиллер
2. Иоганн Вольфганг Гете
3. Генрих Гейне
4. Фридрих Ницше

**14 задание.“Салауат рухы” шиғырының авторы кем?**

1. Фәүзиә Рәхимғолова
2. Рәми Ғарипов
3. Тәнзилә Дәүләтбирҙина
4. Фәнил Күзбәков

**15 зхадание Рус ғалимдары Иван Лепехин менән Петр Рычковтың башҡорт иленә сәйәхәтен тасуирлаған әҫәрҙе атағыҙ.**

1. Я.Хамматов. “Салауат”
2. Б.Рафиҡов. “Көнгәк”
3. Б.Рафиҡов. “Ҡараһаҡал”
4. Н.Мусин. “Һуңғы солоҡ”

**16 задание. 1935 йылда Башҡортостандың Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылында тыуған яҙыусыны билдәләгеҙ.**

1. Ҡәҙим Аралбай
2. Шакир Янбаев
3. Шәриф Биҡкол
4. Рәшит Солтангәрәев

**17 задание. Ғайса Хөсәйеновтың “Ете ырыу” әҫәрендә шул исемдәге йыр менән бәйле башҡорттарҙың боронғо тарихы кем тарафынан бәйән ителә?**

1. Һабрау
2. Ишмөхәмәт сәсән
3. Торомтай сәсән
4. Айҙар сәсән

**18 задание. Түбәндәге өҙөк кемдең ҡайһы әҫәренән алынған?**
**“1941 йылдың ҡышында өс йөҙгә яҡын Баймаҡ егете менән 26 йәшлек Ғәйфулла Сарбаев та Башҡорт атлы дивизияһы составында һуғышҡа китте”.**

1. Кирәй Мәргән. “Ҡурайсының үлеме”
2. Нур Ғәлимов. “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай”.
3. Рамаҙан Өмөтбаев. “Башҡорттар китте һуғышҡа”.
4. Ҡәҙим Аралбай. “Йомабай ҡурайы”.

**19 задание. “Турайғыр” әҫәренең авторын атағыҙ.**

1. С.Агиш
2. Ғ.Хөсәйенов
3. Р.Өмөтбаев
4. Т.Килмөхәмәтов

**20 задание. Ҡобайыр жанрына мөрәжәғәт иткән яҙыусылар төркөмөн билдәләгеҙ.**

1. Ғәли Соҡорой, Шәмсетдин Зәки, М.Өмөтбаев
2. Сафуан Әлибаев, Гөлфиә Юнысова, Динис Бүләков
3. Яҡуп Ҡолмой, Нәжиб Иҙелбай, Фәрит Иҫәнғолов
4. Мөхәмәтша Буранғолов, Жәлил Кейекбаев, Рәми Ғарипов

**21 задание. Рәми Ғариповтың “Салауат батыр” шиғыры кемгә бағышланған?**

1. Арыҫлан Мөбәрәковҡа
2. Заһир Исмәғилевҡа
3. Сосланбәк Тавасиевҡа
4. Жәлил Кейекбаевҡа

**22 задание. Художестволы әҫәрҙә хәл-ваҡиғалар һәм кешеләрҙең эш-хәрәкәте тураһында һүҙ йөрөткән, әҫәр менән уҡыусы араһында тороп, уларҙы үҙ-ара тоташтырыусы затты, автор исеменән йәки берәй герой исеменән һөйләүсене кем тип йөрөтәләр?**

1. автор
2. лирик герой
3. яҙыусы
4. хикәйәләүсе

**23 задание. Рәшит Солтангәрәевтың ҡайһы әҫәре буйынса ҡыҫҡа метражлы фильм төшөрөлгән?**

1. “Беҙ йәшәгән ер”
2. “Тау”
3. “Нефтселәр юлынан”
4. “Ҡиәмәтлек кейәү”

**24 задание. Ғайса Хөсәйеновтың “Һуңғы тарпан” әҫәре ниндәй жанрға ҡарай?**

1. хикәйә
2. хикәйәт
3. легенда
4. ҡисса

**25 задание. Түбәндәге өҙөк кемдең ниндәй әҫәренән:**

Сафия, Сафия...күк түшле күгәрсен,
Өҙгөләнмә, түкмә йәшеңде!
Илем алыр үсен минең өсөн...
Килсе, бер һыйпайым сәсеңде.

1. Д.Юлтый. “Ҡарағол” драмаһы
2. Б.Бикбай. “Ҡаһым түрә” драмаһы
3. Б.Бикбай. “Салауат” драмаһы
4. М.Кәрим. “Салауат” трагедияһы.